Әлфиә Зиннурова

# Күңелле балаҫаҡ

Балалар өсөн йырҙар





Әлфиә Зиннурова



# Күңелле бала саҡ

**Балалар өсөн йырзар**

*Башҡортостан Республикаһы*
*Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланды*

КИТАП
ӨФӨ • 2013

УДК 372.016:78
ББК 74.268.53 Баш
З-54

**Зиннурова Ә. С.**
З-54 Күңелле бала саҡ: балалар өсөн йырҙар. — Өфө: Китап, 2013. — 64 бит.

ISMN 979-0-706381-03-9

Башҡортостаныбыҙға һөйөү хисенән тыуған был баҫмаға әскерһеҙлеккә, көр күңеллелеккә, сағыу лирикаға эйә булған йырҙар тупланған. Уларҙа бәләкәй генә ысыҡта ҡояш нурҙарын да, башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары тауыштарын да, тыуған ерҙең моңон да ишетергә мөмкин.

Методик ҡулланма балалар баҡсаһының музыкаль етәкселәренә, музыка уҡытыусыларына, өҫтәлмә белем биреү педагогтарына, хор етәкселәренә, йырсыларға, шулай уҡ студенттарға тәғәйенләнә.

УДК 372.016:78
ББК 74.268.53 Баш

ТП – 093/13

ISMN 979-0-706381-03-9

© Ә. С. Зиннурова, 2013
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан "Китап" нәшриәте ДУП-ы, 2013

## Инеш

Беҙ бөтәбеҙ ҙә балаларыбыҙҙы һау-сәләмәт, бәхетле һәм киләсәктә уңышлы кешеләр итеп күрергә теләйбеҙ. Быға нисек өлгәшергә һуң?

Сабый сактан уҡ балаларҙа донъяға ижади ҡараш һәм төрлө тормош ситуацияларында юғалып ҡалмайса, уларҙан сығыу юлдарын табыу һәләтен тәрбиәләү мөһим. Бигерәк тә бөгөнгө тормошта тик социаль актив һәм эмоциональ йәһәттән һау кешеләрҙең роле арта төшә. Билдәле булыуынса, музыка баланы төрлө яҡтан үҫтерә: хәтерҙе, интуицияны һәм логик фекерләү ҡеүәһен арттыра, аралашыу һәләтен нығыта, хатта мейенең гармониялы үҫешен тәьмин итә. Мәҫәлән, Британия ғалимдары оҙаҡ ҡына ваҡыт 6 йәштән алып 9 йәшкә тиклемге балаларҙы күҙәткәндәр. Күҙәтеү аҫтында булғандарҙың бер өлөшө фортепиано менән скрипкаға өйрәнгән булған, ҡалғандары — юҡ. Телгәндәргә ваҡыты-ваҡыты менән компьютер томографияһы үткәреп торғандар. Шуныһы ҡыҙыҡлы: бер йыл үткәндән һуң, музыка менән шөғөлләнеүселәрҙең мейеһенең бер өлөшө музыка менән шөғөлләнмәүселәрҙекенә ҡарағанда бер сиреккә үҫеүе теркәлә. Үҫешеп киткән «сөйәл» мейенең ике ярымшары араһындағы информацияны алмаштырыу функцияһы өсөн яуаплы. Тимәк, бала йәһәтерәк уйлай һәм ҡарарҙарын аңлы рәүештә ҡабул итә тигән һүҙ.

Балаларҙың һаулығын һаҡлап ҡалыу — шулай уҡ актуаль мәсьәлә, был йәһәттән дә музыка кешенең организмына ыңғай йоғонто яһай. Музыкаға һөйөү тәрбиәләү — ул һау-сәләмәт тормош ҡанундарына өйрәтеү ҙә. Был маҡсатҡа ирешеүҙең бер юлы — ул күмәкләшеп йәки яңғыҙ килеш йыр йырлау. Кешенең тауыш аппараты — бик үҙенсәлекле, хатта уникаль музыкаль ҡорал. Йырлаған саҡта тыуған тауыш 15–20%-ҡа ғына тышҡы даирәгә тарала. Тауыш тулҡынының ҡалған өлөшө эске органдар менән үҙләштерелеп, уларҙы вибрация хәленә килтерә. Эске органдарҙың бик үҙенсәлекле был вибрацион массажы уларҙың эшмәкәрлеген яҡшырта, ә систематик рәүештә йырлау тын алыу аппаратына ғына түгел, ҡан тамырҙарына ла ыңғай йоғонто яһай, уларҙы нығыта, стрестарҙан арындыра.

Музыка менән шөғөлләнеүҙең тәүге этабы өсөн бер мөһим момент — яңғырауыҡлы хәрәкәттәр — сәпәкәй итеү, тыпырлау, бармаҡ сиртеү һ. б. — менән уйнау тураһында айырым әйтергә кәрәк. Бындай ритмик оҙатыуҙың төрлө формалары бөтә халыҡтарҙа ла, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла бар. Яңғырауыҡлы хәрәкәттәрҙе файҙаланыу балаларҙа бигерәк тә музыканы тойомлау, уның ритмын үҙләштереү өсөн бер юл булып тора.

Йырлағанда баланың йылмайыуы ла бик мөһим. Билдәле булыуынса, тауыш ситкә таралған саҡта, ирендәр йылмайған хәлдә уны тештәргә шылдырып, алғы резонаторҙы ҡулланырға мәжбүр итә. Әгәр уҡыусы йылмайып йырлаһа, тауыш яҡты, таҙа һәм иркен тыуа. Тора-бара

тышҡы йылмайыу эске йылмайыуға әйләнә һәм бала бөтә донъяға, кешеләргә йылмайып ҡарай башлай. Был музыка менән шөғөлләнеүсе балаларҙың һаулығы яҡшырыуына һәм уларҙың сәләмәт йәшәү рәүешенә ынтылыуына, шәхси мөмкинлектәренең үҫеүенә ыңғай тәьҫир итә.

Йыйынтыҡты әҙерләгәндә илебеҙҙең алдынғы педагог-хормейстерҙарының (Ю. Б. Алиев, Г. С. Ригина, М. А. Румер, Н. Л. Гродзенская һ. б.) методик күрһәтмәләренә таянып эш иттек. Билдәле музыканттар В. И. Петрушина, К. Орф, Ш. Сузуки, Е. А. Лобанова, Д. К. Кирнарская, С. В. Шушарджан, А. И. Попов идеяларын үҙ итеп, балалар һаулығын йыр аша нығытырға тәҡдим итәбеҙ. Уларҙың һөҙөмтәле булыуын Сибайҙағы «Сулпан» өлгөлө вокаль-хореографик ансамбле, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның «Тылсым» балалар вокаль студияһы тәжрибәһендә күҙәттек.

*Әлфиә Зиннурова*

*Методик күрһәтмә.*

Был тәрән мәғәнәле йыр. Бер-беренде сәләмләү – иҫәнлек-һаулыҡ, уңыштар, именлек теләү. Йыр балаларҙы төрлө телдәрҙә сәләмләргә өйрәтә, халыҡтар дуҫлығына һәм берҙәмлеккә әйҙәй.

Йырҙы башҡарыр алдынан балаларҙы төрлө илдәргә «сәйәхәткә» саҡырырға һәм төрлө телдәрҙә сәләмләргә өйрәтергә мөмкин. Класты икегә бүлеп, командалар араһында диалог рәүешендә йырлатыу ҙа яҡшы. Ҡушымтала ритм, сәләмләүҙе сирек пауза тотоп төркөмләп әйттереү (дат телендә ул: «Гуда!» (1-се төркөм), ә французса: «Бонжур!» (2-се төркөм) һ. б.) мөһим.

# СӘЛӘМ

Халыҡ һүҙҙәре




2. «Здравствуй!» и «Добрый день!»
Слышим мы каждый день.
Все кто от нас живет вдалеке
Шлют привет на своем языке.

Припев: Привет немецкий: «Гутен таг!»
А по-монгольски: «Сайнбайну!»

3. «Hi!» «Hello!» «Good day!»
Greet each other every day
Everybody who lives on this wonderful World!
Have to say worm regards native words.

Refrain: In Japanese: «Konihiva!»
In English: «Hello!»

4. «Әссәләмәғәләйкум!»
Ишетәбеҙ һәр көн.
Төрлөбөҙ төрлө ерҙә йәшәй,
Һәр кем үҙ телендә сәләмләй.
Ҡушымта: Испан телендә ул: «Ола!»
Ә башҡортса: «Сәләм!»

*Методик күрһәтмә.*

6–7 йәшлек балалар өсөн диапазоны киң булмаған бишек йыры. Киң һикерештәр булһа ла, йыр еңел ятлана. Йырҙың йөкмәткеһе лә хикмәтле: урманда йәшәгән айыу ҙур булһа ла, унан ҡурҡмаҫҡа мөмкин, сөнки ул изге күңелле, ә быуа бүре менән төлкөнән ситләшергә кәрәк – улар усал һәм хәйләкәр. Кешеләр ҙә шулай төрлөсә була.

# БИШЕК ЙЫРЫ

Р. Шәғәлиев һүҙҙәре




Бе - лер - гә кә - рәк, йом - ша - ғым, о - ло - һон да, ке - се - һен дә.
Күп ме йән - лек бар ер - ҙә, кем дуҫ, кем дош - ман беҙ - гә?
Әл - ли бәл - ли, әл - ли - бәү, әл - ли - бәл - ли, әл - ли - бәү!
2. А - йыу бик ҙур - ҙан бул - һа ла, кәм һет - кә не


юк без - ҙе. Күр - гән һа - йын сә - ләм би - реп,
mp
p
mf
cresc.
mf
һо - ра ша - хә ле - без - ҙе. Ап - ты - ра - ма
Әл - ли - бәл - ли,
cresc.
mf
p
dim.
Ҡабатлау өсөн
Тамамлау өсөн
һис бы - ға, һин дә сә - ләм бир у - ға.
әл - ли - бәү, әл - ли - бәл - ли, әл - ли - бәү!
1.
2.
dim.
p
pp

3. Бүре лә бик йыртҡыс түгел
Тамағы туҡ сағында.
Уның менән булғаным бар
Мин бер нисә табында.
Шулай ҙа һаҡ бул унан,
Ул һиңә түгел болан,
Әлли-бәлли, әлли-бәү! } 2 т.

4. Ә төлкө бик тә хәйләкәр,
Йыраҡ йөрө өңөнән.
Күптәребеҙ әрәм булды
Уның татлы теленән.
Һыйпаһа, әйлән тупҡа,
Башыңа етер юҡһа.
Әлли-бәлли, әлли-бәү! } 2 т.

*Методик күрһәтмә.*

Был йыр иң ҡәҙерле, ғәзиздәрҙән-ғәзиз кешеләр – әсәйҙәребеҙгә арнала (9–11 йәшлек балалар өсөн). Шуға ла уны бөтә күңел йылыһын һалып, бөтмәҫ наҙ менән башҡарырға кәрәк. Йырҙың көйө вальс ритмында булғанға күрә, оҙон өҙлөкһеҙ тынды талап итә. Ҡушымтала «әсәй, әсәй, ҡәҙерлем» тигән һүҙҙәргә тап килгән бәләкәй септимаға булған киң һикерешкә иғтибар итергә кәрәк. Уны таҙа башҡарыу өсөн тәүҙә бер нисә тапҡыр «эстән» генә («эстән» ишетер өсөн), аҙаҡ тауыш менән башҡарырға тәҡдим ителә.

# ӘСӘЙЕМ, ҠӘҘЕРЛЕМ

Р. Зөбәйер һүҙҙәре




mp dolce
1. Мин я - ра - там ә - сә-йем - дең сә - сен та - рап үр - гә - нен,
та - ғы у - ның их - лас и - теп ей бал-кы - тып көл - гә - нен.


Ҡушымта
f
dim.
mf
Ә - сәй, ә - сәй, кә - ҙәр-лем, мәң - ге йә - шә донъ - я-ла.
Бү - ләк ит - тең һин ми - не тыл - сым - лы был
Һин - һеҙ ми - ңә бик күңел - һеҙ
1.
2.
донъ - я - ға. бу - лыр и - не донъ - я - ла.
gliss.
mp
p

2. Мин яратам әсәйемдең
Ҡамырлы аҡ ҡулдарын.
Уға ғына бағышлайым
Ошо күңелем йырҙарын.

Ҡушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Был йыр Америка психологы Луиза Хейҙың «Үҙеңде ярат» китабын уҡығандан һуң ижад ителде. Ул: «Тәүҙә кеше үҙен, һуңынан башҡаларҙы яратырға тейеш, юғиһә буш һауыт тирә-яҡтағыларға бер нәмә лә бирә алмай», – тип яҙа. Беҙҙе бала саҡтан тыуған ерҙе, ата-әсәне, мәктәпте һ. б. яратырға өйрәттеләр. Ә үҙеңде яратырға кәрәклеге хаҡында бер һүҙ ҙә булманы. Тәрән мәғәнәле йыр үҙеңде яратырға, матур сифаттар тәрбиәләргә, кәмһенмәҫкә өйрәтә. Тап шул саҡта ғына үҙеңде уратып алған мөхиткә, кешеләргә иғтибарлы шәхес булып үҫеү мөмкин.

Йырҙы күтәренке күңел менән, илһамланып башҡарыу талап ителә. Ҡушымтаһын дәртле бейеү көйөк итеп, ә куплеттарҙы һуҙынҡырап йырлау һөҙөмтәле буласаҡ.

## МИН ҮҘЕМДЕ ЯРАТАМ

И. Илембәтова һүҙҙәре




rit.
уй - нап - кө - ләп үт - кә - рәм һәр бер я - ңы кө - нөм - дә.
моңло, һуҙынҡы
1. Я - ра - там а - та - йым - ды, я - ра - там ә - сә - йем - де,
е - тәк - лә - йем у - лар - ҙы би - реп йы - лы у - сым - ды.
йәнле, дәртле
Ҡушымта
Там - там - там, трам - там - там, мин ү - зем - дә я - ра - там. Там - там - там,
трам - там - там, мин һеҙ - ҙе - лә я - ра - там. Я - ра - там мин и - лем - де,
ма - тур баш - ҡорт те - лем - де, уй - нап - кө - ләп үт - кә - рәм
һәр бер я - ңы кө - нөм - дә. Мин ү - зем - дә я - ра - там.
Тамамлау өсөн
Мин һеҙ - ҙе - лә я - ра - там, я - ра - там!
gliss.

Ҡушымта.

2. Баҫһам көҙгө алдына,
Күрәм унда үҙемде.
Һоҡланып ҡарап торам
Ала алмай күҙемде.

Ҡушымта.

3. Ҡояш апай күктән беҙгә
Йылмайып ҡарап тора.
Мин һеҙҙе бик яратам, тип,
Теләктәр әйтеп тора.

*Методик күрһәтмә.*

Был йырҙың нигеҙендә тыуған ил тәбиғәтенең матурлығы менән һоҡланыу ята. Куплеттарын күңел күтәренкелегендә, ҡушымтаһын (өс тауышҡа башҡарыла, уҡыусыларҙың вокаль әҙерлектәренә ҡарап, бер тауышты бөтөрөргә мөмкин) сағыуыраҡ, тулы тауыш менән йырлау тәьҫирлерәк яңғырар, сөнки йырҙың кульминацияһы ҡушымтала урынлашҡан. Көй уңайлы, уны ике тауышҡа, диалог формаһында ла башҡарырға мөмкин: беренсе фразаны — ҡыҙыҡай, икенсене — малай һ.б.

# БЫЛ МИНЕҢ ТЫУҒАН ЕРЕМ

Р. Ураксина һүҙҙәре






2. Тоям батыр тауышын,
Яулы тарих һағышын.
Бөркөттәр саңҡығанын,
Ҡурайҙың йырлағанын.
Әсәмдең наҙы бит ул,
Күңелдең яҙы бит ул,
Тәүфиҡ, шатлыҡ биреүсе
Йөрәктең сазы бит ул.

Ҡушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Йыр Башҡортостандың милли батыры – Салауат Юлаевҡа арналған. Ул халыҡ стилендә, уңайлы регистрҙа яҙылған, әритмы аттар сапҡанын көүҙәләндерә. Көй башындағы кварта интонацияһы яуға саҡырған кеүек. Был йыр мәктәп йәшендәге бөтә малайҙарҙың иң яратҡан йырҙарының береһе, сөнки улар бөтәһе лә батыр булырға теләй.

# САЛАУАТ БАТЫР

Р. Ураксина һүҙҙәре

Марш темпында






2. Салауаттың ярһыу атын
Уҙыр батырҙар тыуһын,
Топ-топ батырҙар,
Өҙә баҫып барырҙар. } 2 т.

3. Салауаттың утлы рухы
Йәш күңелдәргә тулһын,
Ай-һай, киләсәк
Батыр рухын беләсәк! } 2 т.

*Методик күрһәтмә.*

Башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары тураһындағы йырҙар циклы. «Ҡурай» менән «Мандолина» бик ҡатмарлы түгел. Беренсе йыр — секста, икенсеһе — септима диапазондарында. «Ҡумыҙ» ике тауышҡа яҙылған: альттар партияһы ҡумыҙ яңғырашын тасуирлай («бдиңбдоң»), сопранолар төп көйҙө бик яҡты, йылмайып башҡарырға тейеш.

# ҠУРАЙ

Р. Ураксина көйҙәре






2. Ҡурайҙы үлсәп алдым –
Һигеҙ тотамдан булды.
Уйып ҡуйҙым тишектәр –
Моң сығырға ишектәр.
Ҡурайҙа уйнай Юлай,
Кыҙҙар ҡурай тарталар.
Алмас, Азамат, Булат та
Ҡурайҙы яраталар.

# МАНДОЛИНА

Р. Ураксина һүҙҙәре

Йәнле, дәртле






2. Трәллә-трилли, трәллә-трилли,
Сиртәм дә һаман сиртәм.
Мандолина сиртеп кенә
Бөтәһен дә бейетәм.

Ҡушымта.

# ҠЫМЫЗ

Р. Ураксина һүҙҙәре






2. Ҡумыҙ сиртә белгәндең
Йырлап тора ҡумыҙы,
Ҡумыҙ сиртә бармаҡтар,
Бейеп китә аяҡтар.

Ҡушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Был йырҙы тыуған Башҡортостанды данлаусы гимн тип атарға була. Квинта һәм секстаға байтаҡ һикерештәре булған был көй балалар өсөн киң диапазон — дециманы һәм бер туҡтауһыҙ өҙлөкһөҙ тын алыуҙы талап итә. Йырҙың башы алыҫтан киүек, әкрен генә (piano) башлана ла, яйлап ҡына юғары регистрға күтәрелә, динамик үҫеш һөҙөмтәһендә тауыштар өҫкә бүленә, ә көй үҙе гимн төҫө ала. Бында иң ҡыйыны — динамиканың күтәрелеүен дөрөҫ күрһәтеү. Йырҙы башланғыс класс уҡыусылары ла, өлкәндәр ҙә башҡара ала.

# БАШҠОРТОСТАН – ТЫУҒАН ЕРЕМ

И. Илембәтова һүҙҙәре




Кушымта
иҫ - кән ел-дә - ре шун-дай е - ләҫ. Баш-ҡор-то-
стан — тыу - ған е - рем, из-ге та - рих һи-нең е-
рең. Ҡу-рай мо - но, ҡы-лыс сы - ңы, сал бы-ват-




2. Ғорур тауҙар, күк урмандар,
Далалар икһеҙ-сикһеҙ.
Киң ҡырҙарҙа йәйрәп ятҡан
Туҡ башаҡ, алтын диңгеҙ.

Ҡушымта: Башҡортостан — тыуған ерем,
Изге тарих һинең ерең.
Ҡурай моңо, ҡылыс сыңы,
Сал быуаттан килгән йырың.

3. Халкым эшсән бал ҡортолай,
Хеҙмәт йыры илде данлай,
Батыр халкым, рухлы халкым
Үҙ телен, ерен һаҡлай.

Ҡушымта: Башҡортостан — атайсалым,
Һиңә аҡты тамсы ҡаным.
Һинең өсөн эшсән ҡулым,
Башҡортостан — яҡты уйым.

*Методик күрһәтмә.*

Марш жанрындағы йыр. Үҙ илең-ырыуың өсөн ғорурлыҡ, халыҡ традицияларына ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт, илһөйәрлек һәм милли үҙаң тәрбиәләй.

Йырҙы тыныс, ҡыйыу һәм асыҡ дикция менән башҡарырға кәрәк.

# ШӘЖӘРӘ

Р. Айсыуакова һүҙҙәре






2. Салауаттай батыр егеттәре
Ата аманатын тотҡандар.
Ғәзиз ере өсөн йән аямай
Илен һаҡлап яуға сапҡандар.

Ҡушымта.

3. Шәжәрә ағасы үсә бара,
Яҡты унының килер көндәре.
Бөгөн Яңы Сибай ерен данлай
Атайсалдың ғорур улдары.

Ҡушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Йыр тыуған ауылға, ауылдаштарға, тыуып үҫкән төйәккә арналған. Ул изгелек һәм киң күңеллелек, башҡаларға, тыуған ергә һөйөү хистәрен тәрбиәләй һәм иғтибарлы булырға өйрәтә.

Йыр халыҡ стилендә, ля-минор тоналлегендә яҙылған. Уның башы лирик, моңло планда, ҡушымтаһы — дәртле, күңелле. Ритмик ҡыйынлыҡтар юҡ: бөтә тауыштар тигеҙ оҙонлоҡтар — һигеҙлеләр һәм ун алтылылар аша бирелгән. «Һау ғынамы», «изге булһын» һәм башҡа һүҙҙәргә тап килгән бороолоштарға иғтибар итергә кәрәк. Таҙа интонациянан тыш, уларҙы дөрөҫ башҡарыу өсөн шулай уҡ асыҡ дикция ла талап ителә.

# ҺАУМЫҺЫҒЫҘ, АУЫЛДАШТАР!

Ә. Алдырханова һүҙҙәре






2. Олотауым, Маяҡ тауым,
Улағым шифа, дауа.
Йәнтөйәгем — йәшәйешем
Һин генә һулар һауам.

Ҡушымта.

3. Олатайҙар аманатын
Онотмай һәр беребеҙ.
Яратабыҙ, ҡәҙерләйбеҙ —
Ҡиммәт тыуған еребеҙ.

Ҡушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Йыр Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугирҙарға арнала. Әгәр ҙә тәүге ике куплетты тыйнаҡ һәм тотанаҡлы итеп башҡарыу дөрөҫ булһа, өсөнсөһөн горур һәм тантаналы йырларға кәрәк, сөнки был — йырҙың кульминацияһы. Ҡушымтала балалар музыка ҡоралдарын — өсмөйөш менән ҡыңғырауҙарҙы ҡушырға мөмкин: уларҙан таралған тауыш олатайҙар миҙалдарының сыңлауына оҡшаған.

# ОЛАТАЙЫМ МИҘАЛДАРЫ

Р. Ураксина һүҙҙәре




1.О ла - та - йым ми - зал - да - ры сың - ғыл - дап, сың - сың сың - лай.
Мин тың - ла - йым шул сың - дар - ҙы, һең - лем дә сың - ды тың - лай.




2. Олатайым оло юлда
Ауыр юлдарҙы үткән.
Еңеүсе олатайымды
Тыуған яҡтары көткән.

Ҡушымта.

3. Олатайым миҙалдары
Сыңғылдай һағыш менән:
— Онотмағыҙ, онотмағыҙ
Кемдәр ҙур яуҙа үлгән.

Ҡушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Йыр Белем көнөнә – 1 сентябргә арналған. Тәүҙә йырҙың ике варианты ижад ителде: беренсеһе – халыҡ стилендә, икенсеһе – пунктир ритм менән ҡатмарлыраҡ заманса стилдә, балалар икенсе стилде һайланы. Ҡайһы бер ҡыйынлыҡтар булыуға ҡарамаҫтан (синкопалар, гәҙәти булмаған боролоштар), балалар йырҙы еңел өйрәнә. Бынан сығып шундай һығымта яһарға мөмкин: әгәр ҙә йыр оҡшай икән, балалар теләһә ниндәй ҡыйынлыҡтарҙы ла еңеп сыға.

# БЕЛҺӘҢ ИНЕ...

И. Илембәтова һүҙҙәре






2. Белһәң ине, белһәң ине,
Белһәң ине, белһәң ине,
Болоттарҙы
Кем ҡыуалай һауала?
Белһәң ине, белһәң ине,
Ә ямғырын яуҙырғанда
Болот ҡайҙан һыу ала?

Ҡушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Йыр Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө — 8 Мартҡа арналған. Яҡты, джаз ритмы менән һуғарылған, байрамса яңғыраған был йыр 5—7 йәшлек балаларға тәғәйенләнә.

# ӘСӘЙҘӘР БАЙРАМЫ

Р. Ураксина һүҙҙәре




f
mf
cresc.
ҙәр бай-ра - мы, был шун-дай көн и- кән. Ә - сәй-ҙәр бай-ра-мы,
был шун - дай көн и - кән.
1.2.
Тамамлау өсөн

2. Әсәйем, алтыным,
Кил һине үбәйем. } 2 т.
Шатланып ҡарап тор,
Ҙур булып үсәйем. } 2 т.

3. Күңелгә бир рәхәт
Яҡты көн, нурлы көн. } 2 т.
Әсәйҙәр байрамы
Бәхетле, нурлы көн. } 2 т.

*Методик күрһәтмә.*

Был йыр Алтынгөл исемле бәләкәй ҡыҙға бағышланған. Ул йырһыҙ һәм бейеүһеҙ үҙен бер көн дә күҙ алдына килтерә алмай. Йырҙың көйө байтаҡ үҙгәреп тороусан, ваҡыты менән бәләкәс сексталарға һәм таҙа квинталарға күтәрелеп йә төшөп китә. Музыкаль яҡтан һәләтле балалар өсөн яҙылған. Йыр 16-сы һәм 8-се ноталар менән башланыу сәбәпле, һүҙҙәр тиҙ һәм асыҡ әйтелергә тейеш, былар барыһы ла яҡшы дикцияны үстерә. Йырҙы яҡты, асыҡ, яңғырап торған тауыш менән башҡарыу хуплана.

# АЛТЫНГӨЛ

Р. Ураксина һүҙҙәре






2. Яҡты ҡояш, сәскәләр ҙә
Йырлаңалар йырымда.
Бөгөн йырлаған шат йырым
Бына үҙем турында.
Исемемде яратамын,
Яңғырай моңло йырҙай.
Йырымдағы исемем дә
Тарала алтын нурҙай.

Ҡушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Был йыр ритм һәләтен үҫтереүгә булышлыҡ итә, сөнки 4-се, 8-се һәм 16-сы ноталарҙың синкопалары алмаш килә. Йырҙың көйө секвенцияларҙан төҙөлгән һәм беренсе фразаның ритмы периодик рәүештә ҡабатлана, шуға күрә, синкопалы ритмлы булыуға ҡарамаҫтан, ул тиҙ өйрәнелә. Йыр дәртле до-мажорҙа яҙылған, әммә теләгәндә 2 йәки 3 яртышар тонға күтәрергә мөмкин. Тыпырлау һәм сәпәкәй итеү йырҙы өйрәнеүҙе еңеләйтә, бәрәстең һикереүҙәрен күрһәткән саҡта сәпәкәй итеү еңел баҫымға тура килергә тейеш. Синкопаларҙы яҡшыраҡ һиҙемләү өсөн, шым һәм тулы тауышта тексты әйтеү әһәмиәтле. Бәләкәс бәрәстәрҙең уйнауына, һикереп шаярыуҙарына оҡшатып, йырҙы еңел, дәртле башҡарырға кәрәк.

# БӘРӘС ҠУНАҠҠА БАРА

Г. Ситдикова һүҙҙәре

Дәртле, шаян






2. Серәкәйҙәр серелдәшә:
— Сер ҙә сер, сер ҙә сер,
Һин өйөңә инеп ҡара,
Кер ҙә кер, кер ҙә кер.

Май ҡуңыҙы килеп етә:
— Ғыжы-ғыж, ғыжы-ғыж,
Хужаһыҙ өйгә кем инә —
Һыҙ ҙа һыҙ, һыҙ ҙа һыҙ. } 2 т.

3. Тәгәрмәстәй өйҙән сыға
Тәгәрлек, тәгәрлек.
Мөгөҙҙәрен һелкеп ҡуя
Тәкәббер, тәкәббер.

Ҡуркты тәкә:
— Ҡусҡар ағай,
Инмәйем, инмәйем,
Һиңә бүтән ҡунаҡ булып
Килмәйем дә килмәйем. } 2 т.

*Методик күрһәтмә.*

Бәхетле бала саҡ тураһындағы йыр. Ҡайһы бер ҡыйынлыҡтар көйҙә түгел, ритмда бар. Ул — синкопалы һәм был үҙенсәлек йырға шаянлыҡ, мутлыҡ характерын өҫтәй. Был ритмды балалар тиҙерәк отһон өсөн, уны ҡат-ҡат эстән генә бышылдап ҡабатлатырға кәрәк.

# ШАЯН ЙЫР

И. Илембәтова һүҙҙәре




Кү - бә - ләк - тәр - ҙән дә ма - тур ша - ян кыҙ - ҙар, ма-лай - ҙар.
f
mf
Ҡушымта
p
mp
Тур - ғай - ҙар о - са пыр - пыр, бе - сәй ир - кә - ләй мыр - мыр,
f cresc.
ff
беҙ йыр - лай - быҙ, беҙ уй - най - быҙ, бе - йей - беҙ ты - пыр - ты - пыр.


Тур-ғай-ҙар о-са пыр-пыр, бе-сәй ир-кә-ләй мыр-мыр,
беҙ йыр-лай-быҙ, беҙ уй-най-быҙ, бе-йей-беҙ ты-пыр-ты-пыр.

2. Йүгерәләр, һикерәләр
Һис кенә тик тормайҙар.
Алсаҡ йөҙлө, шат күңелле
Шаян ҡыҙҙар, малайҙар.

Ҡушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Йыр бөтә өләсәйҙәргә бағышлана, 8 Март байрамына ҡарата балаларға өйрәтергә тәҡдим ителә.

Был – шаян йыр. Ул джаз стилендә яҙылған. Балаларҙың йырҙы пунктирлы ритмда һәм шат кәйефтә башҡарыуы мотлаҡ. Йырлағанда мимиканың үҙгәреп тороуы шарт: аптырау, аңламау, үпкәләү, шатлыҡ йөҙҙәрҙә сағылырға тейеш. Асыҡ дикция һәм артикуляция кәрәк. Бының өсөн һүҙҙәрҙе төрлө темптарҙа шыбырлап әйтеү ярҙам итәсәк. «Понимаешь? – тим» фразаһының артабанғы йүнәлеше түбәнге октаваға төшөүенә иғтибар итергә кәрәк. Был фразаны балалар интонация менән йырлаһын өсөн, тәүҙә һүҙһеҙ үҙ аллы (сольфеджио), һуңынан аккордлы оҙатыу ярҙамында ҡысҡырып (бөтә тауышҡа) башҡартырға мөмкин. Аккордтар тоналлекте ишетергә һәм кәрәкле ноталарға һалып йырларға ярҙам итә.

# МИНЕҢ БАБУШКАМ

Г. Ситдикова һүҙҙәре






*Методик күрһәтмә.*

Был шаян йыр атайҙарҙың байрамы — 23 Февралгә бағышланған. Балалар һорауы буйынса ул «рэп» стилендә ижад ителде һәм музыкаль грамота ҡағиҙәләре буйынса аныҡ ҡына билдәләнгән юғарылығы булмаған тауыштар «x» тамғаһы (икенсе төрлө әйткәндә, «һөйләү» телмәре) менән бирелде.

Солист партияһын йырҙы тиҙ, аныҡ һәм матур итеп башҡара белгән уҡыусыға бирергә кәрәк. Ҡушымтаны бөтә балалар йырлай. Йомғаҡлау (кода) солист һәм хор араһындағы диалог кеүек яҙылған. Йырҙа әллә ни вокаль ҡыйынлыҡтар булмаһа ла, уны «уйнап», театрлаштырылған күренеш кеүек күрһәтә белергә кәрәк.

## ШӘП КЕШЕ

Р. Миңнуллин һүҙҙәре

Шаян






2. Минең әле бер кат та
Колакты бормаһа ла,
Һабантуйҙарҙа мине
Еңгәне булмаһа ла,
Ул — зирәк тә, шаян да,
Акыллы ла, һәйбәт тә.
Кәңәшсе һәм ярҙамсы,
Ул алтын куллы кеше!

Кушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Тылсым – ул бәләкәй «тылсымсылар» – йыр һәм бейеү аша бөтә тирә-яҡты матурлыҡҡа табан үҙгәрткән балалар иле. Ике тауышҡа йырлау өсөн. Йырҙың башында сопрано партияһы (staccato) тамсының тамғанын сағылдыра. Шул фонда альттар сәйер, хатта әкиәти йәки мөғжизәле бишек йыры кеүек төп көйҙө башҡара. Күңелле ҡушымта тиҙ һәм шат бейеү кеүек йырлана. Бында иң мөһиме – тылсымлы музыка донъяһы атмосфераһын тыуҙырыу. Уның өсөн тауыштарҙың яңғырауыҡлы, осоусан (таралыусан) характерҙа булыуына ирешергә кәрәк. Хормейстер теләге буйынса йырҙы бер тауышҡа ла йырларға мөмкин.

# ТЫЛСЫМ

З. Фәйзуллина һүҙҙәре




mp
Тыл - сым,тыл - сым...
mf
1.Тыл - сым,тыл - сым — моң доңъ-я - һы, мөғ-жи-зәң-дән
Зәң - гәр о - фоҡ - тар-ҙы иң-ләр ө-сөн, һин би-рә-һең
f
mp
dim.
mp
cresc.
та-мам ар - бал-дым. Кү - ңел - дәр - ҙә шат-лыҡ а - уаз-да - ры
беҙ - гә рух, көс - тө. Тыл - сым, тыл - сым, һин-дә саф-ла-на - быҙ
dim.
mp
cresc.


баш - ҡа - ла - ры ки - нәт та - рал - ды.
та - быр ө - сөн
Кушымта
дәртле
Тыл- сым, тыл -
Тыл- сым, тыл -
ер - ҙә бә - хет - те.
cresc.


сым, о - шо из - ге а - уаз са - ҡ(ы)рып тор -
сым, о - шо из - ге а - уаз са - ҡ(ы)рып тор -
fis-m7
h-m
һон без - ҙе гел бер - гә, кү - ңел-дәр - ҙә из - ге моң би - ше -
һон без - ҙе гел бер - гә, кү - ңел-дәр - ҙә из - ге моң би - ше -
E7
mp
A
ген тир - бәл - дер - гән ғә - зиз был ер - гә. Моң и - ле -
mp
ген тир - бәл - дер - гән ғә - зиз был ер - гә. Моң и - ле -


A
fis-m7
нә ил - тер из - ге һук - мак баш - ла - на ул без - ҙең "Тыл - сым"-
нә ил - тер из - ге һук - мак баш - ла - на ул без - ҙең "Тыл - сым"-
D
h-m
E
да. Йыр - ла - ған - да дәрт - ле яң-ғ(ы)рар йыр - ҙар, баш - ҡа өн -
да. Йыр - ла - ған - да дәрт - ле яң-ғ(ы)рар йыр - ҙар, баш - ҡа өн -
дәр ты - нып тор-һон - дар!
дәр ты - нып тор-һон - дар!
cresc.

2. «Тылсым» — бит ул моң бишеге,
Сыңлап тора һәр саҡ йырҙары,
Бөркөт һымаҡ батыр малайҙары,
Аҡҡош кеүек һылыу ҡыҙҙары.

Беҙҙең өсөн матур йырҙар йырлау
Оло бәхет үҙе донъяла.
Йыр һөйгәндәр бигерәк бәхетлеләр,
Һынатмаҫтар улар бер ҡайҙа ла.

Ҡушымта.

*Методик күрһәтмә.*

Тәбиғәт, йыл миҙгелдәре, ҡоштар һәм хайуандар тураһындағы («Яҙ килә», «Көҙ», «Яңы йыл», «Ҡыш бабай», «Тыныслыҡ сыйырсығы», «Күбәләк», «Тал», «Йәйге каникул») йырҙар циклы балаларҙа тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләй, уның төрлө тауыштарын — япраҡтар шаулауын, шишмә сылтырауын, ҡоштар һайрауын ишетергә өйрәтә. Бөтә йырҙар ҙа башҡарыуға уңайлы. Уларҙы сәхнәләштерергә тәҡдим ителә: тасуири мимика, тыпырлауҙар, ябай бейеү хәрәкәттәре һәм төрлө музыка ҡоралдарында уйнау йырҙарҙың образдарын, һис шикһеҙ, сағыуыраҡ күрһәтергә ярҙам итә.

# ЯҘ КИЛӘ

И. Илембәтова һүҙҙәре

Күңелле




Солист
Хор
Солист
mf
mp
mf
1. Кар-ҙан и - реп сыҡ-ты ла а - а - а... йыр-лап аҡ - ты
Күл - лә - үек - кә су - ма - лар сыр-сыу ки - леп
simile
гөр - лә - үек. а - а - а...
тур - ғай - ҙар.
Күҙен ҡы - ҫа ҡо - яш - ҡа
Яҙ кил - де, тип, шат - ла - ныр
а - а - а... көҙ - гө ке - үек кү - лә - үек.
у - лар шу - лай уй - най - ҙар.
cresc.
f




2. Танауҙарға ҡояшкай
Һипкелдәрен тарата.
Шат, көләс балаларҙы
Ҡояш бигерәк ярата.
Күләүеккә сумалар
Сыр-сыу килеп турғайҙар.
Яҙ килде, тип, шатланып
Улар шулай уйнайҙар.

Кушымта.

# ЙӘЙГЕ КАНИКУЛ

И. Илембәтова һүҙҙәре

Күңелле, дәртле




2. Ял итә уҡытыусылар,  
Ял итә уҡыусылар,  
Йәйге каникулдан йәмле  
Тағы ниндәй ваҡыт бар?

Ҡушымта.

3. Күбәләктәй уҙышырбыҙ  
Сәскәле туғайҙарҙа,  
Балыҡ кеүек сумып, сумып  
Йөҙөрбөҙ тулҡындарҙа.

Ҡушымта.

# ТАЛ

Р. Ураҡсина һүҙҙәре




mf
2. Сыл - тыр - сыл - тыр тәң - кә - лә - ре
mf
йә - шел бәр - хәт о - ҙон - са.
Сыл - тыр - ла - шып то - ра - лар




3. Елбер-елбер сәләм бирә
Һығылма бил талҡайҙар.
Талға баҫып һайрай ҡоштар,
Талдан шәбен тапмайҙар.

# КҮБӘЛӘК

Р. Ураксина һүҙҙәре




mp
mf
1. Леп - леп - леп, леп - леп - леп,
шат - ла - на, бе - йей ул.
Сәс - кә - нән сәс - кә - гә
хәл бе - леп йө - рөй ул.
Ҡушымта
f
Йәй - ғо - ро әй - лә - нә
ҡа - на - ты о - сон - да,




2. Сәскәләр һуттарын
Эсә лә күбәләк,
Леп-леп-леп елпенә
Сәскәләр тирәләп.

Ҡушымта.

3. Ҡояштың үҙенән
Күбәләк нур ала,
Күбәләк һут эскәс,
Сәскә лә нурлана.

Ҡушымта.

# ТЫНЫСЛЫҠ СЫЙЫРСЫҒЫ

Р. Ураксина һүҙҙәре





mf
mp
кил - де бит сы - йыр - сык. Донь - я - лар йәм - ле, ти, бул - ған - да
Кушымта
ты - ныс - лык. Һай - ра - ны шат йы - рын: “Бай - рам - ға, —
tr
cresc.
ти, — йы - йын. Тыу - ған йорт тып - ты - ныс”, — тип йыр - лай сы - йыр - сык.
f

2. Бик йыраҡ ерҙәрҙән
Килгән шул сыйырсыҡ.
Теләге бер генә:
Тыныслыҡ, тыныслыҡ!

Ҡушымта.

# Көҙ

М. Кәрим һүҙҙәре




2. Өй алдында яңғыҙ ҡарт тирәгем
Һуңғы япраҡтарын ҡаҡһа ла,
Тормошта яҙ – сирень ағастары
Сәскә ата кеүек баҡсала.

Ҡушымта.

# ЯҢЫ ЙЫЛ

Ә. Алдырханова һүҙҙәре

Дәртле




2. Шатлыҡ-ҡыуаныстар менән
Яңы йыл килә беҙгә.
Тылсымлы мөғжизәләре
Төрлө бүләк һәр кемгә.

Ҡушымта.

# ҠЫШ БАБАЙ

Р. Ураксина һүҙҙәре

Күңелле






2. Эй, Ҡыш бабай, Ҡыш бабай,
Матур бейей шуҡ бабай. } 2 т.
Яҙ етеү менән ҡаса,
Әҙләһәң дә, юҡ, малай. } 2 т.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Инеш . . . . . . . . . . 3
Сәләм. *Халыҡ һүҙҙәре* . . . . . . . . . . 5
Бишек йыры. *Р. Шәгәлиев* . . . . . . . . . . 6
Әсәйем, ҡәҙерлем. *Р. Зөбәйер* . . . . . . . . . . 9
Мин үҙемде яратам. *И. Илембәтова* . . . . . . . . . . 12
Был минең тыуған ерем. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 14
Салауат батыр. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 16
Ҡурай. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 18
Мандолина. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 20
Ҡумыҙ. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 21
Башҡортостан — тыуған ерем. *И. Илембәтова* . . . . . . . . . . 23
Шәжәрә. *Р. Айсыуаҡова* . . . . . . . . . . 26
Һаумыһығыҙ, ауылдаштар! *Ә. Алдырханова* . . . . . . . . . . 27
Олатайым миҙалдары. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 28
Белһәң ине... *И. Илембәтова* . . . . . . . . . . 31
Әсәйҙәр байрамы. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 33
Алтынгөл. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 35
Бәрәс ҡунаҡҡа бара. *Г. Ситдиҡова* . . . . . . . . . . 37
Шаян йыр. *И. Илембәтова* . . . . . . . . . . 39
Минең бабушкам. *Г. Ситдиҡова* . . . . . . . . . . 42
Шәп кеше. *Р. Миңнуллин* . . . . . . . . . . 43
Тылсым. *З. Фәйзуллина* . . . . . . . . . . 45
Яҙ килә. *И. Илембәтова* . . . . . . . . . . 50
Йәйге каникул. *И. Илембәтова* . . . . . . . . . . 53
Тал. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 54
Күбәләк. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 56
Тыныслыҡ сыйырсығы. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 58
Көҙ. *М. Кәрим* . . . . . . . . . . 60
Яңы йыл. *Ә. Алдырханова* . . . . . . . . . . 61
Ҡыш бабай. *Р. Ураҡсина* . . . . . . . . . . 62



*Методическое пособие*

**Зиннурова** Альфия Саитовна

Компьютерная нотографика И. И. Хисаметдинова

**ВЕСЕЛОЕ ДЕТСТВО**

Сборник песен для детей

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире Г. А. Раянова
Мөхәррире И. М. Йосопова
Биҙәлеш мөхәррире А. Р. Мөхтәруллин
Техник мөхәррире В. Р. Абдрахманова
Корректорҙары Л. Ф. Саниева, А. Х. Хәкимова

Баҫырға ҡул ҡуйылды 17.04.13. Форматы 60x90 $^1/_8$. Офсет ҡағыҙы. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 8,0. Шартлы буяу отт. 18,0. Иҫәп-нәшер таб. 10,52. Тиражы 2400 дана. Заказ 130509.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының
«Белая река» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450078, Өфө, Салауат Юлаев проспекты, 55.





**Әлфиә Сәйет ҡыҙы Зиннурова** 1960 йылдың 19 июлендә Баймаҡ районының Мерәҫ ауылында донъяға килә. Бәләкәйҙән йыр-моңға ғашиҡ ҡыҙ 8 йәшенән Баймаҡ музыка мәктәбенең фортепиано класында шөғөлләнә башлай. 1972 йылда Республика йәш пианистар конкурсындағы уңышлы сығышынан һуң, Өфө дәүләт сәнғәт институты янындағы музыка мәктәбенә уҡырға саҡыралар. 1976–1980 йылдарҙа Ә. Зиннурова – Өфө сәнғәт институты студенткаһы.

Хеҙмәт юлын Сибай педагогия училищеһында башлай. 1987 йылда Ҡазан дәүләт педагогия институтының музыка бүлеген тамамлай. Унда уҡығанда балалар өсөн тәүге йырҙарын, фортепиано өсөн әҫәрҙәрен ижад итә.

1993 йылда БДУ-ның Сибай институтына эшкә килә һәм байтаҡ йылдар музыка кафедраһын етәкләй. «Сулпан» балалар вокаль-хореографик ансамблен ойоштора.

2002 йылда педагогия фәндәре кандидаты исеменә, 2004 йылда РФ-ның Мәғариф һәм фән министрлығы ҡарары менән традицион башҡарыу өлкәһендә доцент дәрәжәһенә лайыҡ була.

Музыкаль-эстетик тәрбиә биреү өлкәһендәге уңыштары өсөн «БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре» исеме бирелә. Әлеге көндә Әлфиә Зиннурова М. Аҡмулла исемендәге БДПУ профессоры.

КИТАП